*Гәшиә МӘҒӘЛИМОВА*

# ”Ғөсөлләнгән сабый кеүек күңел...”

## Изге теләкле бер балаңмын

Иртәнсәкәй тороп һәр эшемде
”Бисмиллаһи” тиеп башлайым,
Ике донъя рәхәттәре күрһен
Минең дә генә ғәзиз башкайым.

Таңдан тороп ҡиблаға ла ҡарап
Йорт, илемә ырыҫ теләйем,
Эй Хоҙайым, тоҙоң, икмәгеңдән
Айырма, тип онон иләйем.

Туҡлыҡ булһын
          һәр саҡ илемдә, тип
Ашҡа туҡмас киҫеп һаламын,
Бар донъяға етер кеүек йылым,
Изге теләкле бер балаңмын.

## Һүҙ ҡәҙере

Бик һаҡ ҡына яҙам шиғырҙарҙы,
Үлсәп кенә әйтәм һүҙҙәрҙе,
Һүрелеп ҡуймаһындар нурҙары тип,
Миңә һөйөп баҡҡан күҙҙәрҙең.

Яҡшы һүҙҙең ҡәҙерҙәрен беләм,
Яман һүҙҙең яҙыҡлығын беләм,
Шуға күрә кешеләргә киләм
Яҡшы һүҙем, асыҡ йөҙөм менән.

Яҡшы һүҙем, аҡ күңелем менән
Изгелеккә юлдар асамын,
Насар күңел, ғәйбәт тоҡсайынан
Уттан ҡасҡан кеүек ҡасамын.

## Аллаһы тәғәләгә мәҙхиә

Аллаһыға килеп һыйыныуым
Сафлыҡ бөрктө зиһен, аңыма,
Күңел донъям ғөсөлләнгән сабый
Кеүек булып ҡалды тағы ла.

Эй ҡөҙрәтле, маһир, илаһи зат,
Һине данлап тәсбих тартамын,
Лә иләһә иллаллаһу, тиһәм,
Тоям изгелектең артыуын.

Һис асылмаҫ серле изге йомғаҡ,
Һин яратҡан донъя беҙҙең өсөн,
Пәйғәмбәрҙәрҙе бит таң ҡалдырған
Һис кәмемәҫ, бөтмәҫ ҡөҙрәт-көсөң...

## Мөхәммәт пәйғәмбәргә мәҙхиә

Аллаһының пәйғәмбәре
Эй хөрмәтле Мөхәммәт,
Һин өйрәткән юлдан бара
Мосолман затлы өммәт!

Аллаһының пәйғәмбәре
Эй маҡтаулы Мөхәммәт,
Һинең изгелектәреңә
Өммәтеңдән ҙур рәхмәт!

Аллаһының пәйғәмбәре
Эй изге йән Мөхәммәт,
Кеселекле күңеленә
Кешелек әйтә рәхмәт!

## Аллаһының барлығы

Аллаһ юҡ, тип өйрәттеләр
Балаларҙы мәктәптә,
Аллаһының барлығы бит
Өҫтәлдәге икмәктә.

Аллаһының барлығы бит
Эскән аҡ һөтөбөҙҙә,
Нурланып ай ҡалҡыуында,
Тыуған һәр көнөбөҙҙә.

Аллаһының барлығы бит
Гөлдәрҙә, сәскәләрҙә,
Изгелектең нурын сәскән
Хөрмәтле әсәләрҙә.

Аллаһының барлығы бит —
Йәйрәп ятҡан еребеҙ.
Ғәзиз ерҙең тупрағында
Үлебеҙ һәм теребеҙ.

## Сурайым

Һағыныуҙарҙан йөрәк сарсаһа,
Күңелемде бушлыҡ ҡаплаһа,
Ҡырҡ эшемә ҡарап тормайым,
Сурайыма ҡайтып урайым.

Тыуған төйәгем һин, Сурайым,
Һине һағынып йырҙар йырлайым,
Төштәремдә Димкәйемде кисһәм,
Был бәхеткә, тиеп юрайым.

Сусаҡ тауға менеп ғорурланып
Тағы һиңә бағам, Сурайым,
Һоҡланып та һиңә туймайым,
Илһам төйәге һин, Сурайым.

Һинән китәм, әммә хушлашмайым,
Оҙаҡ көттөрмәмен, Сурайым,
Күңелкәйем шулай болоҡһоһа,
Һинән илһам алып урайым...

## Март ҡарҙары

Март ҡарҙары яуа өйөрөлөп,
Тәҙрәмдән тышҡа ҡараһам,
Күңелкәйем тула ҡайнар хискә,
Ваҡыт араларын һанаһам.

Епшек яҙ ҡарҙары өйөрөлөп
Тәҙрәмә һырый һырғанаҡ,
Яҙ һулышын март елдәре бөркә
Тирә-яҡты һырыған тотош аҡ.

Ҡарғалар ҙа ҡайтты ҡаңҡылдашып
Тыуған төйәктәрен һағынып,
Ғөсөлләнә улар яҙ ҡарында
Ҡаурый ҡанаттарын ҡағынып.

